**Башҡортостан Республикаһы мәғариф ойошмаларында башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙе һәм уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр**

**I. Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеүҙең норматив-хоҡуҡи нигеҙҙәре.**

Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы Законының 6 статьяһына (п.2) ярашлы Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт теле республиканың дөйөм белем биреү, башланғыс һәм һөнәри белем биреү мәғариф ойошмаларында өйрәнелә. "Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт телендә уҡытыу һәм уны өйрәнеү Башҡортостан Республикаһы территорияһында урынлашҡан дәүләт һәм муниципаль мәғариф ойошмаларында дәүләт аккредитацияһы булған мәғариф программалары сиктәрендә федераль дәүләт мәғариф стандарттарына, мәғариф стандарттарына ярашлы тормошҡа ашырыла".

Милли республикаларҙа икенсе дәүләт телен индереү Рәсәй Федерацияһының Конституцияһының 68 статьяһында ла (п.2) каралған.

“Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законының 3 статьяһына (п.1) ярашлы Башҡортостан Республикаһының бөтә территорияһында башҡорт һәм рус телдәре дәүләт телдәре булып тора.

Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән №273-ФЗ “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Федераль Законының 14 статьяһына (п.3) ярашлы Рәсәй Федерацияһының милли республикаларында ерле законадарға ярашлы дәүләт аккредидацияһы үткән мәғариф ойошмаларында республиканың дәүләт телдәрен өйрәнеү мөмкинлеге бирелә.

Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының 2009 йылдың 6 октябренән №373 бойороғо менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 19.3 пунктына ярашлы башланғыс дөйөм белем биреүҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттары дәүләт телдәрен өйрәнеү һәм туған телдәрҙә белем биреүҙе ойоштороу мөмкинлеге бирелә. Федераль дәүләт белем

биреү стандарттарын ғәмәлдә кулланыу шарттарында башланғыс кластарҙа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү базис пландарҙың вариатив өлөшө сәғәттәре иҫәбенә тормошҡа ашырыла.

5–11 кластарҙа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының 2015 йылдың 29 апреленән № 905 приказы менән раҫланған базис уҡыу планына һәм өлгө уҡыу пландарына ярашлы алып барыла.

## II. Туған телдәрҙе өйрәнеү һәм туған телдәрҙә уҡытыуҙың норматив-хоҡуҡи нигеҙҙәре.

Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68 статьяһы (п.3) Рәсәй Федерацияһында "...уның бөтә халыҡтарына туған телен һаҡлау, уны өйрәнеүгә һәм үҫтереүгә шарттар тыуҙырыу хоҡуғы" гарантиялай.

Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 54 статьяһы "Башҡортостан Республикаһы үҙ территорияһында йәшәгән халыҡтарға туған телдәрен һаҡларға тиң хоҡуҡтар гарантиялай, уны ирекле өйрәнергә һәм үҫтерергә мөмкинлектәр тыуҙыра".

Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән №273-ФЗ "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль Законының 14 статьяһына (п.1, 4) ярашлы һәр кемгә мәғариф системаһы биргән мөмкинлектәрҙән сығып туған телендә белем алыу хоҡуғы гарантиялана.

"Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Рәсәй Федерацияһы Законының 9 статьяһына (п.1-5) ярашлы Рәсәй Федрацияһы гражданлары тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. Ошо уҡ закондың 10 статьяһына ярашлы туған телендә белем алырға

теләүселәргә дәүләт һәм мәғариф ойошмалары бөтә шарттар тыуҙырырға бурыслы.

Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы Законының 6 статьяһына (п.3) ярашлы Башҡортостан Республикаһында һәр кем дәүләт аккредитация үткән мәғариф программалары нигеҙендә Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы туған телендә белем алырға хоҡуҡлы. Бының өсөн дәүләт шаттар тыуҙырырға бурыслы.

"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 8 статьяһына (п.1-5) ярашлы һәр кем тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. 9 статьяһында (п.1) дәүләттең туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыу бурысы билдәләнә.

Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының 2009 йылдың 6 октябренән №373 бойороғо менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 19.3 пунктына ярашлы башланғыс дөйөм белем биреүҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттарына

дәүләт телдәрен өйрәнеү һәм туған телдәрҙә белем биреүҙе ойоштороу мөмкинлеге бирелә.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырғанда туған телдәрҙә белем белем биреү башланғыс дөйөм белем биреү базис уҡыу планының 3 һәм 4 варианттарына ярашлы алып барыла.

Туған телде өйрәнеү һәм әҙәби уҡыу башланғыс дөйөм белем биреү базис планының 2 вариантына ярашлы ойошторола, уның буйынса туған телдәрҙе өйрәнеүгә 3 сәғәт бүленгән.

5-11 кластарҙа туған телдә белем алыу һәм туған телде өйрәнеү Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының 2015 йылдың 29 апреленән № 905 приказы менән раҫланған базис уҡыу планына һәм өлгө уҡыу пландарына ярашлы алып барыла.

## III. Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптары буйынса эшкәртелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыу-уҡытыу методик комплекттар:

**1. Башҡорт милли мәктәптәре өсөн:**

1. Юлмухаметов М.Б. «Примерные программы по башкирской литературе для 5-9, 10-11 классов башкирских школ». –Уфа: «Китап», 2011;

2. Юлмухаметов М.Б. и др. «Туған әҙәбиәт -5”. Уфа: «Китап», 2011;

3. Юлмухаметов М.Б. и др. «Туған әҙәбиәт -6”. Уфа: «Китап», 2011;

4. Юлмухаметов М.Б. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Туған әҙәбиәт -5”.–Уфа: «Китап», 2012.

5. Юлмухаметов М.Б. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Туған әҙәбиәт -6”.–Уфа: «Китап», 2012.

6. Юлмухаметов М.Б. и др. «Рабочая тетрадь -5 к учебнику «Башкирская литература для 5 класса общеобразовательных учреждений”. Уфа: «Китап», 2013;

7. Юлмухаметов М.Б. и др. «Рабочая тетрадь -6 к учебнику «Башкирская литература для 6 класса общеобразовательных учреждений”. Уфа: «Китап», 2013;

8. Юлмухаметов М.Б. и др. Книга для чтения по башкирской литературе. 5 класс». Уфа: «Китап», 2012;

9. Юлмухаметов М.Б. и др. Книга для чтения по башкирской литературе. 6 класс». Уфа: «Китап», 2012;

10. Юлмухаметов М.Б. и др. Контроль һәм баһалау дәфтәре – 5кл. –Уфа: «Китап»,2014;

11. Юлмухаметов М.Б. и др. Контроль һәм баһалау дәфтәре – 6 кл. –Уфа: «Китап»,2014;

12. Юлмухаметов М.Б. и др. «Туған әҙәбиәт -7". Уфа: «Китап», 2014;

13. Юлмухаметов М.Б. и др. «Туған әҙәбиәт -8". Уфа: «Китап», 2016;

14. Идельбаев М.Х., Кунафин Г.С.. «Туған әҙәбиәт -9". Уфа: «Китап», 2016;

15. Юлмухаметов М.Б. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Туған әҙәбиәт -7-8".–Уфа: «Китап», 2016.

16. Габитова З.М. «Примерные программы по башкирскому для 5-9, 10-11 классов башкирских школ». –Уфа: «Китап»,2012;

17. Псянчин Ю.В., Габитова З.М., Аюпов Р.Р., Мухаметова Р.М.. и др. «Башкорт теле-5». Уфа: «Китап», 2016;

18. Псянчин Ю.В., Габитова З.М., Аюпов Р.Р., Мухаметова Р.М.. и др. «Башкорт теле-5». Уфа: «Китап», 2016;

19. Псянчин Ю.В., Габитова З.М., Аюпов Р.Р., Мухаметова Р.М.. «Методические рекомендации к учебнику «Башкорт теле -5». –Уфа: «Китап», 2016;

20. Султанбаева Х.В. и др. «Башкорт теле-6». Уфа: «Китап», 2015;

21. Султанбаева Х.В. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Башкорт теле -6». –Уфа: «Китап», 2015.

22. Тагирова С.А. и др. «Башкорт теле-7». Уфа: «Китап», 2016;

23. Тагирова С.А. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Башкорт теле -7». –Уфа: «Китап», 2016;

24. Тагирова С.А. и др. «Башкорт теле-8». Уфа: «Китап», 2016;

25. Тагирова С.А. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Башкорт теле -8». –Уфа: «Китап», 2016;

26. Псяничн Ю.В. и др. «Башкорт теле-9». Уфа: «Китап», 2016;

27. Псянчин Ю.В. и др. «Методические рекомендации к учебнику «Башкорт теле -9». –Уфа: «Китап», 2016;

**2. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу өсөн:**

28. Габитова З.М. и др. «Примерные программы по башкирскому языку для 5-9, 10-11 классов» (для русскоязычных школ». –Уфа: «Китап», 2015;

29. Габитова З.М., Усманова М.Г.«Башҡорт теле - 5».- Уфа: «Китап», 2014;

30. Габитова З.М. "Методическое пособие к учебному пособию «Башҡорт теле» для 5 класса" - Уфа: «Китап», 2014;

31. Габитова З.М., Хамитова Р.Р. Рабочая тетрадь к учебному пособию «Башҡорт теле-5» - Уфа: «Китап», 2014;

32. Габитова З.М., Усманова М.Г.«Башҡорт теле -6».- Уфа: «Китап», 2014;

33. Габитова З.М. "Методическое пособие к учебному пособию «Башҡорт теле» для 6 класса" - Уфа: «Китап», 2016;

34. Габитова З.М., Усманова М.Г.«Башҡорт теле - 7».- Уфа: «Китап», 2014;

35. Габитова З.М. "Методическое пособие к учебному пособию «Башҡорт теле» для 7класса" - Уфа: «Китап», 2016;

36. Габитова З.М., Усманова М.Г.«Башҡорт теле – 8».– Уфа: «Китап», 2016;

37. Габитова З.М. "Методическое пособие к учебному пособию «Башҡорт теле» для 8 класса" – Уфа: «Китап», 2016;

38. Габитова З.М., Усманова М.Г.«Башҡорт теле – 9».– Уфа: «Китап», 2016;

39. Габитова З.М. "Методическое пособие к учебному пособию «Башҡорт теле» для 9 класса" – Уфа: «Китап», 2016.

**3. Башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыу өсөн:**

40. Габитова З.М. и др. «Примерные программы по башкирскому языку для 5-9, 10-11 классов» (для русскоязычных школ». –Уфа: «Китап», 2016

41. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А. и др.«Башҡорт теле -5».– Уфа: «Китап», 2015;

42. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А "Методическое пособие к учебному пособию «Башҡорт теле» для 5 класса" – Уфа: «Китап», 2015;

43. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А.«Башҡорт теле – 6».– Уфа: «Китап», 2016;

44. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А. "Методическое пособие к учебному пособию «Башкорт теле» для 6 класса" – Уфа: «Kuman», 2016;

45. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А.«Башкорт теле – 7».– Уфа: «Kuman», 2016;

46. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А "Методическое пособие к учебному пособию «Башкорт теле» для 7класса" – Уфа: «Kuman», 2016;

47. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А.«Башкорт теле – 8».– Уфа: «Kuman», 2016;

48. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А "Методическое пособие к учебному пособию «Башкорт теле» для 8 класса" – Уфа: «Kuman», 2016;

49. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А.«Башкорт теле – 9».– Уфа: «Kuman», 2016;

50. Хажин В.И., Хуснутдинова Ф.А "Методическое пособие к учебному пособию «Башкорт теле» для 9 класса" – Уфа: «Kuman», 2016.

## IV. Башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән эш программаларын төҙөү:

**Эш программалары түбәндәге структура буйынса эшкәртелә:**

1. Уҡыу предметын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр;

2. Уҡыу предметының (курс) дөйөм йөкмәткеһе;

3. Тематик планлаштырыу (һәр теманы үҙләштереү сәғәт һаны бүленешен күрһәтеп).

**Эш программаһының структураһы:**

Эш программалары белем биреү ойошмаларының компетенцияһына инә һәм үҙ аллы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Эш программалары билдәле бер белем алыу дәрәжәһен иҫәпкә алып төҙөлә.

Айырым бер уҡыу-уҡытыу предметының белем биреү йөкмәткеһе уҡыусының профессиональ оҫталығы һәм үҙ предметын нисек күҙаллауынан сығып проектлаштырыла.

Эш программаһын төҙөгәндә, ҡабул иткәндә һәм раҫлағанда түбәндәге документтарға иғтибарлы булыу кәрәк:

– федераль дәүләт белем биреү стандарттары;

– уҡыу-уҡытыу предметының өлгө (примерная) программаһы;

– экспертизаны һәм апробацияны үҙгән авторлыҡ программаһы;

– белем биреү ойошмаһының төп белем биреү программаһы;

– УМК (дәреслек, дәреслеккә методик ҡулланма, эш дәфтәрҙәре, контроль-тикшереү материалдары, электрон ҡулланма).

Уҡытыусының эш программаһы административ структуралар тарафынан уҡыусыларҙың уҡыу-уҡытыу предметының йөкмәткеһе ни дәрәжәлә үҙләштерел-гәнлеген өйрәнә һәм тикшерә торған документ булып тора.

Программаның титул бите документтың беренсе бите булып һанала (ул биттә һан ҡуйылмай).

**1. Эш программаһын эшкәртеүҙе титул битенән башлайбыҙ, ул үҙ эсенә:**

- Белем биреү учреждения атамаһы;
- Эшкәртелгән программаны раҫлау;
- Эшкәртелгән программа курсының исеме;
- Курсты өйрәнеүсе класс;

– Программаны төҙөүсе уҡытыусының исем-шәрифтәре;

– Программаны эшкәртеү урыны һәм датаһы.

**2. Эш программаһының ҡыҫҡаса аңлатма яҙыуы була һәм ул үҙ эсенә:**

1) уҡыу-уҡытыу предметының дөйөм белем биреүгә индергән өлөшө;

2) уҡыу-уҡытыу комплекттары тураһында мәғлүмәт;

**3)** уҡыу-уҡытыу предметының дөйөм маҡсаттары һәм бурыстары.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр** бүлегендә федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына ярашлы шәхси, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре теркәлә.

"Туған тел" фәнен үҙләштереүҙә иректәргә тейеш шәхси һөҙөмтәләр булып түбәндәгеләр тора:

1) патриотик хис, илгә, Рәсәйҙең күп милләтле халҡының үткәненә һәм бөгөнгөһөнә хөрмәт тәрбиәләү; үҙеңдең этник сығышыңды, үҙ халҡыңдың, тыуған ереңдең тарихын, телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, кешелектең һәм Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ нигеҙҙәрен белеү; күп

милләтле Рәсәй йәмғиәтенең гуманистик, демократик һәм традицион кыйммәттәрен үзләштереү;

2) укыуға, хеҙмәткә карата яуаплы мөнәсәбәт формалаштырыу;

3) хәҙерге доньяның социаль, мәҙәни, тел, рух күп төрлөлөгөн иҫәпкә алған, фәндең һәм ижтимағи тәжрибәнең хәҙерге заман үҫеш дәрәжәһенә тап килгән донъяға тулайым караш формалаштырыу;

4) башка кешегә, уның фекеренә, донъяға карашына, мәҙәниәтенә, теленә, диненә, граждандлык позицияһына, донъя һәм Рәсәй халыктарының тарихына, мәҙәниәтенә, диненә, ғөрөф-ғәҙәттәренә, телдәренә, кыйммәттәренә аңлы, ихтирамлы һәм игелекле мөнәсәбәт формалаштырыу;

5) фәнде үҙләштергәндә ижтимағи тормоштоң формаларын һәм ролдәрен, тәртиплелек кағиҙәләрен, йәшәү нормаларын үҙләштереү;

6) шәхси һайлап алыу нигеҙендә әхлак проблемаларын хәл итеүҙә компетентлыкты һәм әхлаки аңлылыкты үҫтереү, әхлаклылык тойғоһо һәм әхлаки яктан үҙ-үҙеңде тәртипле тотоу нормаларын формалаштырыу;

7) фәндәрҙе үҙләштереү барышында, фәнни-эҙләнеү, ижади һәм башҡа эшмәкәрлек вағытында, шулай уҡ аралашыу процесында (уҡыусы-уҡыусы, уҡыусы-уҡытыусы һ.б) коммуникатив компетентлыҡты үҫтереү;

8) йәмғиәт һәм кеше тормошонда ғаиләнең әһәмиәтен аңлау, ғаилә ҡиммәттәрен ҡабул итеү, ғаилә ағзаларына ҡарата хөрмәтле һәм ҡайғыртыусан мөнәсәбәттә булыу;

9) донъя һәм Рәсәй халыҡтарының әҙәби мираҫын үҙләштереү процесында эстетик зауыҡты үҫтереү.

**"Туған тел" фәнен өйрәнеү барышында ирешелергә тейеш метапредмет һөҙөмтәләр булып түбәндәгеләр тора:**

1) белем алыу маҡсатын һәм бурыстарын үҙаллы билдәләү, танып белеү мотивтарын һәм ҡыҙыҡһыныусанлыҡты үҫтереү;

2) маҡсаттарға ирешеү юлдарын, уҡыу һәм танып белеү бурыстарын хәл итеүҙең эффектив ысулдарын аңлы рәүештә һайлау;

3) планлаштырылған һөҙөмтәләр менән үҙ хеҙмәтеңде тиңләштерә белеү, һөҙөмтәләргә ирешеү

процесында эшмәкәрлекте контролдә тотоу, тәкдим ителгән шарттарҙа һәм ҡуйылған талаптарҙа эшмәкәрлегеңдең ысулын билдәләү, үҙгәреп торған ситуацияларҙа эшмәкәрлегеңә коррекция индереү;

4) баһалау, үҙбаһалау нигеҙҙәренә эйә булыу;

5) төшөнсәләрҙе билдәләү, дөйөмләштерә, аналогиялар таба, төркөмдәргә бүлә, сәбәп-һөтижә бәйләнешен күрһәтә, логик фекерләр төҙөй, һығымта яһай (индуктив, дедуктив, аналогия буйынса) алыу;

6) модель һәм схемалар, билдә һәм символдарҙы төҙөү, үҙгәртеү һәм ҡуллана белеү;

7) аңлап-төшөнөп уҡыу алымына эйә булыу;

8) үҙ тиңдәштәрең һәм уҡытыусылар менән уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора, төркөмдә һәм үҙаллы эшәй, үҙ фекереңде формалаштыра, аргументлаштыра һәм уны яҡлай белеү.

**“Туған тел” фәнен өйрәнеү барышында түбәндәге предмет һөҙөмтәләре сағылдырырға тейеш:**

1) формаль һәм формаль булмаған мәҙәниәт ара һәм шәхес ара аралашыуҙарҙа кешеләр араһындағы аралашыуҙарҙың эффектлығын тәьмин итеүсе телмәр

эшмәкәрлеге төрҙәрен үҙләштереү (тыңлау, уҡыу, һөйләү һәм яҙыу);

2) белем биреү һәм үҙаллы белем алыу процесында шәхестең ижади һәм интелектуаль һәләттәрен үҫтереүҙә телдең мөһим роль башҡарыуын аңлау;

3) туған телдең коммуникатив-эстетик мөмкинлектәрен ҡулланыу;

4) туған тел тураһындағы фәнни белемде системалаштырыу һәм киңәйтеү, уның берәмлектәре һәм баҫҡыстары араһындағы бәйләнештәр барлығына төшөнөү, туған телдең төп берәмлектәрен һәм категорияларын, лингвистиканың төп төшөнсәләрен үҙләштереү;

5) һүҙгә төрлө төрҙәге анализ (фонетик, морфемик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һүҙбәйләнешкә һәм һөйләмгә синтаксик анализ һәм шулай уҡ текстҡа күп аспектлы анализ яһау күнекмәләрен формалаштырыу;

6) актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу, аралашыу стиленә һәм ситуацияға ярашлы туған телдә хистәрҙе һәм уйҙарҙы иркен белдереү өсөн һөйләмдә ҡулланылыусы грамматик сараларҙың күләмен киңәйтеү;

7) туған тел лексикаһының һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, төп нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион), һөйләү этикеты нормаларын үҙләштереү; уларҙы телдән һәм яҙма фекерҙәрҙе барлыҡҡа килтергәндә һөйләү практикаһында ҡулланыу тәжрибәһен булдырыу; телмәрҙе үҙаллы камиллаштырырға ынтылыу;

8) дөйөм кешелек ҡиммәте буларак тел мәҙәниәте өсөн яуаплылыҡ хисе формалаштырыу.

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе**

Уҡыу предметының йөкмәткеһе бүлегендә үтеләһе темаларҙың исемлеге һәм уларҙың ҡыҫкаса йөкмәткеһе бирелә.

**Тематик планлаштырыу**

Тематик планлаштырыу эш программаһының иң мөһим компоненты булып иҫәпләнә, сөнки ул уҡыу материалын, уҡыу планына һәм белем биреү ойошмаһының йыллыҡ график эшенә ярашлы рәүештә төҙөлә. Унда дәрестәрҙең темалары, сәғәттәр һаны, планлаштырылған һөҙөмтәләр, өй эше, дәресте үткәреү ваҡыты, иҫкәрмәләр урынлаштырыла. Уҡыу материалы

тематик план буенча эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыла.

Һеҙҙең ҡарамаҡҡа тематик планлаштырыуҙың яҡынса формаһы (бер нисә вариантта) тәҡдим ителә. (Уҡытыусы уға мәктәп кимәлендә һайланылған йә методик берекмә ултырышында ҡабул ителгән формаға яраҡлы үҙгәрештәр индерә ала).

**1-се вариант**

| **Бүлек атамаһы, дәрес темаһы** | **Сәғәт һаны** | **Планлаштырылған һөҙөмтәләр** | | | **Өйгә эш** | **Үткәрү вакыты** | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | Предмет | Метапредмет | Шәхси | | План. | Факт. |
| | | | | | | | |

**2 -се вариант**

| **Бүлек атамаһы, дәрес темаһы** | **Сәғәт һаны** | **Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре** | **Өй эше** | **Үткәрү вакыты** | | **Иҫкәрмәләр** |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | План. | Факт. | |
| | | | | | | |

Иҫкәрмәләрҙә уҡытыусы үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте урынлаштыра ала. Мәҫәлән, дәрес белем биреү

йөкмәткеһенең вариатив компонентын тормошҡа ашырыу нигеҙендә үҙгәрылыуы, ауырлыҡ кимәлен иҫәпкә алып, өй эшен дифференциациялауы һ.б.

## V. Заман талаптарына ярашлы башҡорт теле дәрестәрен проектлау

### Хәҙерге заман башҡорт теле дәресенең структураһы

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының төп үҙенсәлеге –уларҙың эшмәкәрлеккә ҡоролған белем биреү һәм уҡыусы шәхесен үҫтереүгә йүнәлтелгән булыуы. Хәҙерге заман белем биреү системаһы уҡытыу һөҙөмтәләрен билдәле белемдәр йыйылмаһы итеп ҡарауҙан баш тартып, реаль эшмәкәрлек төрҙәрен формалаштырыуға йөҙ тота. Йәғни белем биреүҙән тыш, был белемдәрҙе ғәмәлдә ҡулланырға өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының методологик нигеҙен шәхесте үҫтереүгә, гражданлыҡ тойғоһон формалаштырыуға йүнәлтелгән системалы-эшмәкәрлекле белем биреү алымдары тәшкил итә. Системалы-эшмәкәрлекле белем биреү алымдары уҡыусылар үҙләштерергә тейешле универсаль уҡыу эшмәкәрлеге һәм төп бурыстарҙан сығып белем биреүҙең

мөһим һөҙөмтәләрен айырып алырға мөмкинлек бирә. Мәғариф системаһында мәктәп уҡыусыһының шәхесе үҫеше, беренсе сиратта, уҡыу-уҡытыу, тәрбиә процесының нигеҙе буларак сығыш яһаусы универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу аша тәьмин ителә. Уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлек төрҙәрен үҙләштереүҙәре уларға артабан үҙ аллы яңы белемдәр алырға, шулар аша компетенцияларын үҫтерергә, индивидаль белем алыу траекторияһын ойошторорға мөмкинлектәр тыуҙыра.

Бөгөнгө көндә белем биреү процесында уҡыусыларҙың үҙ аллы белем ала (таба), кәрәкле мәғлүмәт туплай, гипотеза тәҡдим итә, һығымталар яһай белеүҙәрен формалаштырыусы алымдарҙы һәм методтарҙы ҡулланыу проблемаһы актуаль булып ҡала. Йәғни бөгөнгө уҡыусыла уның үҙ аллы белем ала белеүен тәмьин итеүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге формалашырға тейеш. Шуға күрә лә белем алыуҙы ойоштороуҙа алға ҡуйылған бурыстарҙы һәм килеп тыуған мәсьәләләрҙе сисеүгә йүнәлтелгән системалы-эшмәкәрлекле белем биреү ысулдары уңышлыларҙан һанала.

Бөгөнгө мәғариф системаһы – мәктәп – мәғлүмәт

сығанағы булыуҙан бигерәк белем алырға өйрәнеү үҙәгенә әүерелә. Бында уҡыусы белем алырға өйрәнә, уҡытыусы уны әҙер килеш биреүсе биреүсе генә түгел, ә был белем алыу процесын ижади ойоштороусы оло иптәш, ярҙамсы буларак сығыш яһай. Әлеге бурыстар уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлектәрен формалаштырыу аша тормошҡа ашырыла ла инде. Универсаль уҡыу эшмәкәрлектәре (шәхсән, танып белеү, регулятив һәм коммуникатив) – дөйөмләштерелгән эш-хәрәкәттәр, уҡыусыларҙың донъяны танып белеүен, белем алыуға ынтылыштарын тәьмин итә, ҡыҙыҡһыныуҙарын ҡандыра. Уҡыусыларҙың алған белемдәре уларҙың үҙ эҙләнеүҙәре, эшмәкәрлектәре һөҙөмтәһе булһын өсөн был эҙләнеүҙәрҙе, танып белеү эшмәкәрлеген ойошторорға (ойоштора белергә), был эшмәкәрлек йәки процесс менән идара итергә, уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре артабан үҫтерергә кәрәк.

Бөгөнгө көндә яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттары заманса дәрестәргә дөйөм талаптар билдәләй:

- яҡшы йыһазландырылған кабинетта ойошторолған яҡшы дәрес һәйбәт башланып һәйбәт

тамамланырға тейеш;

• уҡытыусы дәрестең темаһын, маҡсатын, бурыстарын асыҡ формалаштырып, үҙенең дә уҡыусыларының да эшмәкәрлеген планлаштырырға тейеш;

• дәрес ниндәй ҙә булһа проблеманы хәл итеүгә ҡоролған һәм үҫтерешле булырға тейеш: уҡытыусы үҙе лә уҡыусылар менән хеҙмәттәшлеккә ынтыла һәм шул уҡ ваҡытта уҡыусыларҙы ла уҡытыусы һәм класташтары менән хеҙмәттәшлеккә йүнәлтә белә;

• уҡытыусы проблемалы һәм эҙләнеү ситуациялары ойоштора, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә;

• уҡыусылар үҙҙәре һығымта яһайҙар;

• дәрес ижади мөхиттә үтә;

• ваҡытты һәм һаулыҡты һаҡлау ҡағиҙәләре үтәлә;

• иғтибар үҙәгендә – уҡыусылар;

• уҡыусыларҙың белем кимәлен һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алып эш материалы һайлана;

• уҡыусыларҙың психофизиологик, индивидуаль, кластың профиль үҙенсәлектәрен, кәйеф-тороштарын иҫәпкә алына;

• уҡытыусының үҙ методик оҫталығын күрһәтә,

файҙалана белеүе;

- кире бәйләнеш булдырыу;
- дәрес ыңғай психологик мөхиттә үтергә тейеш.

Яңы шарттарҙа уҡытыусы түбәндәге педагогик техника принциптарына таянып эшләргә тейеш:

- һайлау ирке (белем биреүсе йәки етәксе эшмәкәрлектә уҡыусыға һайлау хоҡуғы бирелә);
- асыҡлыҡ (белем биреп кенә ҡалмай, уның сиктәрен дә күрһәтергә, уҡыусыны сиселеше өйрәнелеүсе курс сиктәренә сыҡҡан проблемалар алдына ҡуйыу);
- эшмәкәрлек (уҡыусылар тарафынан белемдәрҙең эшмәкәрлек формаһында үҙләштерелеүе, йәғни уҡыусы алған белемдәрен практикала ҡуллана, файҙалана белергә тейеш);
- идеаллыҡ (эшмәкәрлектең юғары һөҙөмтәлелеге, уҡыусыларҙың үҙ мөмкинлектәрен, белемдәрен, ҡыҙыҡһыныуҙарын максималь файҙаланыу);
- кире бәйләнеш (белем биреү процесын кире бәйләнеш ысулдары системаһы ярҙамында контролдә тотоу).

Бөтә белем биреү процесы хеҙмәттәшлеккә нигеҙләнгән эшмәкәрлеккә ҡоролған булырға тейеш. Уҡыусы был процестың әүҙем ҡатнашыусыһы булғанда

ғына ул эшмәкәрлеккә йәлеп ителеп, юғары сифатлы төплө белемгә эйә була. Яңы стандарттарға ярашлы дәрестә уҡыусының тирә-яҡты танып белеүгә мотивацияһын булдырыу зарур, уға мәктәптә алған белемдең тормоштан айырмалы рәүештә алынған булмауын, ә киреһенсә, шәхес булараҡ тормошҡа әҙерләнергә, уны танып белергә, тейешле мәғлүмәтте эҙләп табырға булышлыҡ итеүен күрһәтеү мөһим. Тапҡан белемдәрҙе һәм күнекмәләрҙе реаль тормошта ҡулланыу мөмкинлектәрен күрһәтеү ҙә талап ителә.

Яңы стандарттар уҡыу ситуацияһы тигән яңы термин индерә, был белем биреү процесының шундай айырым берәмеге – уҡыусылар уҡытыусы ярҙамында үҙҙәренең эшмәкәрлек предметын билдәләйҙәр, төрлө уҡыу эшмәкәрлеге ярҙамында уны тикшерәләр, үҙгәрештәр индерәләр (мәҫәлән, формулировкаһын үҙгәртәләр, йә үҙҙәренсә тасуирлайҙар һ.б., өлөшләтә уны хәтерҙә ҡалдыралар). Уҡытыусы алдына айырым белем алыу эшмәкәрлеге берәмеге булараҡ уҡыу ситуацияһын барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ белем биреү бурыстарын уҡыу ситуацияһына әйләндерә белеү бурысы ҡуйыла.

Уҡыу ситуацияһын барлыҡҡа килтереү түбәндәгеләрҙе

иҫәпкә алырға тейеш:

- уҡыусының йәш үҙенсәлеге;
- уҡыу предметының үҙенсәлеге;
- уҡыусыларҙа универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең формалаштырыу.

Предмет һөҙөмтәләренән тыш уҡыусыларҙың метапредмет һөҙөмтәләрен дә уңышлы формалаштырыу өсөн бөгөн дәресте нисек төҙөргә һуң?

Ғәҙәттә традицион рәүештә уҡытыу процесының биш принцибын билдәләйҙәр (Анри Файол):

- планлаштырыу;
- ойоштороу;
- ғәмәлгә ашырыу һәм контроль;
- коррекция;
- анализ.

Уҡыу-уҡытыу процесының төп формаһы буларак бөгөн дә дәрес ошо уҡ принциптарға нигеҙләнә. Уҡытыусы быға тиклем дә, бөгөн дә дәресен алдан планлаштырырға, уны ойоштороуҙо ныҡлап уйларға, алып барырға, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген баһаларға, кәрәк булғанда төҙәтмәләр индерергә, анализ яһарға, контроль-баһалау эштәрен үткәрергә бурыслы. Эш практикаһында

киң таралған катнаш дәрес миҫалында дәрестә уҡытыусы менән уҡыусы эшмәкәрлегенә талаптарҙы ҡарап үтәйек:

| **Дәрескә талаптар** | **Традицион дәрес** | **Заманса дәрес тибы** |
|---|---|---|
| Дәрес темаһын иғлан итеү | Уҡытыусы уҡыусыларға хәбәр итә (еткерә) | Уҡыусылар үҙҙәре формалаштыра |
| Маҡсатты һәм бурыстарҙы хәбәр итеү | Уҡытыусы формалаштыра һәм уҡыусыларға нимәгә өйрәнергә тейеш булыуҙарын хәбәр итә (еткерә) | Белгәндәренең һәм белмәгәндәренең сиген билдәләп, уҡыусылар үҙҙәре формалаштыра |
| Планлаштырыу | Уҡытыусы уҡыусыларға маҡсатҡа | Уҡыусылар тарафынан ҡуйылған |

| | | |
|---|---|---|
| | ирешеү өсөн улар ниндәй эштәр башҡарырға тейеш икәндәрен хәбәр итә | маҡсаттарға ирешеү юлдары билдәләнә |
| Уҡыусыларҙың практик эшмәкәрлеге | уҡытыусы етәкселеге аҫтында уҡыусылар практик эштәр башҡаралар (ғәҙәттә фронталь ысул менән) | Уҡыусыларүҙҙәре билдәләгән планға ярашлы белем алыу эшмәрлеген тормошҡа ашыралар (индивидуаль һәм төркөм) |
| Контролде тормошҡа ашырыу | Уҡытыусы уҡыусылар тарфынан практик эштәрҙең башҡарылыуын контролдә | Уҡыусылар контролде тормошҡа ашыралар (үҙконтроль, үҙ-ара контроль формалары |

| | | |
|---|---|---|
| | тота | кулланыла) |
| Коррекцияны тормошка ашырыу | Укытыусы укыусыларҙың эштәрҙе башкарыу барышында һәм һөҙөмтәләре буйынса коррекцион эштәр үткәрә | Укыусылар килеп тыуған ауырлыктарҙы үҙҙәре хәл итергә тырышалар |
| Баһалау | Укытыусы укыусыларҙың дәрестә эштәрен баһалай | Укыусылар һөҙөмтәһенә карап эшмәкәрлеккә баһа бирәләр |
| Йомғаклау | Укытыусы укыусыларҙың нимәне иҫтә калдырыуҙарын асыклай | Рефлексия үткәрелә |
| Өйгә эш | Укытыусы иғлан итә һәм | Укыусылар үҙ мөмкинлектәренән |

| | | |
|---|---|---|
| | аңлата (ғәҙәттә барыһына ла бер үк эш) | сығып тәкдим ителгән эш төрөн һайлап алалар |

Килтерелгән ике дәрес тибынан күренеүенсә, улар, беренсе сиратта, укытыусының һәм укыусының дәрестәге эшмәкәрлеге буйынса бер-береһенән айырыла.Традицион типтағы дәрестәге укытыусы кушканды ғына үтәп ултырыусынан укыусы хәҙер инде төп эшмәкәргә, ижадсыға әүерелә.

Дәрескә әҙерлек бөгөнгә көндә лә бөтә укытыусыларға таныш дәрес этаптарына нигеҙләнә. Был инде шулай ук дәрестең максатын һәм бурыстарын билдәләү; укыу-укытыу материалының йөкмәткеһен һайлап алыу; укыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу формаларын билдәләү; укытыу алымдарын һәм методтарын һайлап алыу; өйгә эш материалын һайлау; контроль ысулдарын билдәләү; укыусыларҙың эшмәкәрлеген баһалау өсөн дәрестә урын һәм вакытын уйлау; йомғаклау өсөн һорауҙар һайлау, рефлексия ысулдарын билдәләү һәм башкалар.

Ләкин хәҙерге заман дәресенә әҙерлек вакытында

укытыусы һәр этапка эш формаларын, методтарын, укыу материалы йөкмәткеһен, укыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу ысулдарын һайлағанда тәнкит күҙлегенән карап хәҙерге дәрестә укыусы менән укытыусы тиң хеҙмәттәшлек итергә тейеш булыуҙан, емешле ижад итеү мөмкинлектәрен тыуҙырыу кәрәклегенән сығып эш итергә, йәғни үҙенең дә һәм укыусыларҙың эшмәкәрлеген алдан билдәләп, педагогик хеҙмәттәшлек йөкмәткеһен планлаштырырға бурыслы. Укыусының эшмәкәрлеге өс яклап та иҫәпкә алынырға һәм танып белеү, коммуникатив һәм регулятив һөҙөмтәләргә ирешеүгә йүнәлтелгән булырға тейеш.

Дәрескә әҙерләнгәндә иң катмарлыһы – укыу материалының йөкмәткеһен һәм укытыу (белем биреү) методтарын һайлап алып оптималь кулланыу. Уңышлы дәрес структураһын түбәндәге шарттар тәьмин итә:

- белем биреүсе, тәрбиә һәм үҫеш максаттарын комплекслы планлаштырыу;
- дәрес йөкмәткеһендә һәм темала төп, мөһим материалды айырыу;
- дәрес этаптарының максатка ярашлы эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү, материалды үҙләштереүҙең,

эшмәкәрлек төрҙәренең рациональ бүленешен тәьмин итеү;

- иң ҡулайлы, эффектив методтарҙы, алымдарҙы һәм уҡытыу сараларын һайлау;
- уҡыусыларҙың психо-физиологик, индивидуаль үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу;
- дәрестең ыңғай үтеүе өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу.

Нигеҙҙә күселек дәрестәр ҡатнаш типта ойоштороla (комбинированный). Был осраҡта дәрестең күп ваҡыты (20-30 минут) яңы материалды үҙләштереүгә арналған булырға тейеш. Яңы материал ныҡлы үҙләштерелһен өсөн уны үтелгән темаларға бәйләп актуалләштереү мөһим. Шуға күрә лә яңы тип дәрестәрҙең башланғыс өлөшөндә үк белемдәрҙе актуалләштереү, уның үткән темалар менән бәйләнешен асыҡлау, был яңы белемдәрҙең киләсәктә беҙгә ниңә, ҡайҙа, ҡасан кәрәк буласағын билдәләү бик мөһим этаптарҙан һанала. Был, үҙ сиратында, предметҡа һәм темаға ҡыҙыҡһыныуҙы арттыра, мөһимлеген, кәрәклеген аңларға булышлыҡ итә (мотивацияны күтәрә). Уҡытыусы менән уҡыусыларҙың хеҙмәттәшлеге нигеҙендә

тыуған эшмәкәрлектә яңы белемдәр үҙләштерелә, практик эш төрҙәрендә нығытыла. Контроль был осракта баһалау ысулы булыуҙан бигерәк ике яклы "укытыусы–укыусы" бәйләнешкә әйләнә. Йомғаклау рефлексия формаһында ойошторола. Был инде иң киң таралған катнаш типтағы дәрестең оптималь системаһын тәшкил итә.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттырына талаптарына ярашлы заманса дәрескә әҙерлек барышында нимә нығырак иғтибар итергә һуң? Беренсе сиратта, алда әйтеп үткән дәрес этаптарын карап үтергә кәрәктер. Дәрестең уңышлылығы күпселек осракта укытыусының уға ни тиклем ентекле әҙерләнеүенә бәйләнгән. Укытыусының дәрескә әҙерләнеүен схематик рәүештә ошолай бирергә мөмкин:

***1-се этап*** – укытыу программаһын өйрәнеү. Эштең был өлөшө укыу йылына әҙерлек ваҡытында ук башлана. Бында инде укыу пердметының дөйөм маҡсатына, бурыстарына, көтөлгән һөҙөмтәләренә һәм айырым блок (модуль) темаларҙың маҡсат һәм бурыстарына иғтибар бүленә, һәр теманың программала тотҡан урыны, башҡа темалар менән бәйләнеше өйрәнелә. Укыу темаһының

үтелгән темалар менән бәйләнешен асыҡлау, киләсәктә үтеләсәк уҡыу материалы менән логик бәйләнешен асыҡлау был теманы өйрәнеүҙең алыҫ һәм яҡын маҡсаттарын һәм бурыстарын билдәләгәндә ярҙам итәсәк.

***2-се этап*** – методик әҙәбиәт өйрәнеү. Программаға ярашлы үтеләсәк темаларҙы билдәләп сыҡҡас, методик әҙәбиәткә, уҡыу-уҡытыу комплектына (дәреслек, электрон дәреслек, өҫтәмә әҙәбиәт һ.б.) нигеҙләнеп эш программаһы төҙөлә. (Ғәбитова З.М. Эш программаһы эшкәртеү буйынса методик кәңәштәр. Башҡорт теле. – Өфө: БР МҮИ нәшриәте, 2014. – 24 бит.)

***3-сө этап*** – конркет дәрес материалын дәреслектән өйрәнеү. Дәреслектәге уҡыу материалы йөкмәткеһен өйрәнеп, уҡытыусы, был материалдың уҡыусылары өсөн ауыр-еңеллеген самалай, ҡайһы өлөшөн берлектә, ҡайһыныһын үҙаллы өйрәнеү мөмкинлектәрен асыҡлай. Ауырыраҡ материалды уҡыусыларға еткереү өсөн методтар, алымдар һайлай.

***4-се этап*** – дәрес темаһы буйынса мәктәптә булған белем биреү сарарын барлау һәм әҙерләү. Уҡытыусы мәктәп һәм кабинет китапханаһындағы тема буйынса

өҫтәмә материалдарҙы өйрәнә, техник һәм электрон белем биреү сараларын барлай, төҙөкләгән тикшерә, карап сыға, дәрестә урынын, вакытын, максатын билдәләй.

Дәрестең тематик планда тотҡан урынынан сығып уның төрө, дөйөм максаты һәм бурыстары билдәләнә. Дәрестең максатын дүрт йүнәлештән сығып билдәләйбеҙ: яңы белемдәрҙе үҙләштереү, ғәмәлдә кулланырға өйрәтеү, ижади һәләттәрен үҫтереү һәм тәрбиәүи максаттар. Дәрестең максатына ярашлы төрө билдәләнә, укыусыларҙың эшмәкәрлеге күҙаллана, күнегеүҙәр, эш төрҙәре һайлап алына, өҫтәмә материал әҙерләнә.

***5-се этап*** – дәрес планын төҙөү. Дәрес планы – укытыусының дәрескә әҙерлек эшенең һуңғы һөҙөмтәһе. Ул тематик планға ярашлыдәрестең башка темалар араһындағы урынынан сығып төҙөлә. Блок йәки модулдә тотҡан урынынан сығып төрө билдәләнә, максаттары һәм бурыстары асыклана.

Дәрестең үҙенсәлеге һәм сифаты уның максаттарына, йөкмәткеһенә, үткәреү методикаһына, мәктәптең, укытыусының һәм укыусыларҙың үҙенсәлектәренә бәйләнгән. Укытыусылар тарафынан

үткәрелгән күп төрлө дәрестәрҙең дөйөм һыҙаттарын билдәләү өсөн уларҙы классификацияларға кәрәк. Яңы быуын Федераль дәүләт белем биреү стандартарына ярашлы, ниндәй маҡсатҡа йүнәлтелгәнлегенә һәм ниндәй һөҙөмтәләр алырға теләүгә ҡарап, дәрестәр түбәндәге типтарға бүленә:

| Дәрес тибы | Маҡсат | Уҡытыуҙың һөҙөмтәһе |
|---|---|---|
| Яңы белемде тәүгә күрһәтеү (яңы белем менән таныштырыу) дәресе | Предмет буйынса яңы белемде тәүге (беренсе тапҡыр) үҙләштереү | Үҙ һүҙҙәре менән ҡағиҙәләрҙе, төшөнсәләрҙе, алгоритмдарҙы барлыҡҡа килтереү, өлгө (үрнәк), алгоритм буйынса ғәмәлдәрҙе эшләү |
| Предмет | Ҡатмарлы | Айырым |

| | | |
|---|---|---|
| буйынса белемде ҡулланыу дәресе | күнегеүҙәрҙе эшләү өсөн предмет буйынса белемде ҡулланыу | уҡыусылар йәки класс коллективы тарафынан ҡатмарлы күнегеүҙәрҙе эшләү |
| Һығымта яһау һәм систематизация лау (алған белемде системаға һалыу) дәресе | Предмет буйынса белемде, универсаль эшмәкәрлекте систематизация лау | Һығымтал ар буйынса йомғаҡ яһай белеү, универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең кимәлен күтәреү |
| Ҡабатлау дәресе | Предмет буйынса белемде нығытыу, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу | Айырым уҡыусылар йәки класс коллективы тарафынан күнегеүҙәрҙе |

| | | |
|---|---|---|
| | | хатаһыҙ эшләү; хатаһыҙ телдән яуап биреү; үҙ хаталарыңды табыу һәм төҙәтеү; бер-береңә ярҙам итеү |
| Контроль дәрес (тикшереү дәресе) | Практик эштәрҙе башҡарыуҙа предмет буйынса белемде тикшереү | Контроль йәки үҙ аллы эштең һөҙөмтәләре |
| Коррекцион (төҙәтеү) дәрес | Хаталар өҫтөндә индивидуаль эш | Үҙ хаталарыңды табыу һәм төҙәтеү |
| Ҡатнаш дәрес | Бер дәрес рамкаларында эшләй алмаған күнегеүҙәрҙе эшләү | Ҡуйылған дидактик бурыстарҙы хәл итеү |

| | | |
|---|---|---|
| Белем алыу экскурсияһы | Тирә-як мөхитте, күренештәрҙе яҡындан өйрәнеү | Реаль тормош ситуацияларында тирә-як мөхитте, күренештәрҙе яҡындан өйрәнгәндә предмет буйынса белемгә эйә булыу һәм уларҙы ҡулланыу; ижади отчет төҙөү |
| Проекттар эшләү һәм практика дәресе | Теоретик ҡағиҙәләрҙе (положениеларҙы) өйрәнеүҙе практик яҡҡа йүнәлтеү | |

Дәрестәрҙең типологияһы менән бер рәттән хәҙерге методика фәне дәрестең структураһына ла ҙур иғтибар

бүлә. Дәрестең структураһы – уның бөтөнлөгөн тәьмин итеүсе бөтә элементтарының берләшмәһе. Дәрестең өлөштәре бер-береһе менән тығыз бәйләнә һәм билдәле тәртиптә эҙмә-эҙлекле төҙөлә. Дәрестең структураһы ҡуйылған маҡсаттарға, өйрәнеләсәк материалдың йөкмәткеһенә, уҡытыу методтары һәм алымдарына, уҡыусыларҙың белем һәм үҫеш кимәленә, уҡытыу процесында дәрестең урынына бәйле. Дәрестәрҙең структураһы күп төрлө, уларҙы тапалған бер ҡалып буйынса ғына үткәрергә ярамай. Үрҙә һанап киткән факторҙарҙан тыш, дәрестең структураһына уҡытыусының ижади потенциалы, конкрет класта конкрет шарттарҙа эшләүе лә тәьҫир итә. Дәрестә ҡулланылған методтар, алымдар, юлдар төрлө бәйләнештә, тәртиптә килергә мөмкин. Заманса башҡорт теле дәресенә белемде үҙләштереү, синтез (тикшеренеү), ҡабатлау һәм нығытыу, белемде тикшереү, практикала ҡулланыу, үҙ аллы эш кеүек элементтарҙың бер-береһенә бәйләнеп килеүе хас.

Яңы стандарттар буйынса бер нисә дәрес төрҙәре (типтары) айырылып ҡаралһа ла дидактик төҙөлөшө структур элементтары (этаптары) уларҙы

берләштереп карарға мөмкинлек бирә. Дәрестең төп дидактик структураһы (төҙөлөшө) дәрестең план-конспектында һәм технологик картаһында сағылыш таба. Уның дәрес тибына карап үҙгәргән өлөштәре лә булһа, күп моменттары дөйөм характерҙа.

1. Ойоштороу моменты:

- тема;
- маҡсат, белем биреүсе, үҫтереүсе, тәрбиәүи бурыстар;
- уларҙы кабул итеү мотивацияһы;
- планлаштырылған һөҙөмтәләр;
- дәрестең шәхес формалаштырыуға йүнәлтелгән булыуы.

2. Өйгә бирелгән эштәрҙе тикшереү (әгәр бирелгән булһа).

3. Дәрестең төп этабында һәр укыусыны әүҙем белем алыу эшмәкәрлегенә әҙерләү:

- укыу-укытыу маҡсатын куйыу;
- белемдәрҙе актуаллаштереү.

4. Яңы материалды еткереү:

- укыу-укытыу мәсьәләһен сисеү (хәл итеү) ;
- яңы белемдәрҙе үҙләштереү;

• уҡыусылар тарафынан яңы материалды аңлау кимәлен тикшереү.

5. Өйрәнелгән материалды нығытыу:

• белемдәрҙе дөйөмләштереү һәм системалаштырыу;

• белемдәрҙе контроль һәм үҙконткроль (үҙ аллы эш, йомғаҡлау контроле).

6. Йомғаҡлау.

• дәрес һөҙөмтәләрен диагностикалау;

• маҡсатҡа ирешеүҙе рефлексиялау.

7. Өйгә эш.

Был структур элементтар һәр дәрес төрө (дәрес тибы) өсөн дөйөм мотлаҡ талап түгел, маҡсаттарға һәм бурыстарға ярашлы улар дәрес планында төрлөсә урын алырға, йәки уҡытыусы тарафынан киңәйтелеүе мөмкин.

## VI. Дәрескә үҙанализ һәм анализ яһау

**Дәресте үткәргәндән һуң уға ентекле анализ яһарға кәрәк. Төплө анализ дәрестең уңышлы йәки уңышһыҙ үтеүен, ҡулланылған эш төрҙәренең һәм методтарҙың эффективлығын билдәләргә ярҙам итә, уҡыусыларҙың**

**потенциалын асыҡлай, перспективаларҙы аса һ.б. Һәр дәрестән һуң уҡытыусы үҙенең дәресенә анализ яһағанда:**

- ҡуйылған маҡсаттарға характеристика бирә һәм уларға ирешеү-ирешмәүҙе анализлай;
- материалдың күләме һәм уларҙы уҡыусыларҙың үҙләштереү сифаты тураһында мәғлүмәт бирә;
- уҡыусылар менән эшләүҙә ҡулланылған методтарға характеристика бирә һәм уларҙы уңышлылығы яғынан баһалай;
- уҡыусыларҙың әүҙемлеген баһалай һәм уларҙың эшмәкәрлеген ойоштороуҙа ҡулланылған алымдарҙың эффективлығын билдәләй;
- үҙ эшмәкәрлегенең айырым аспекттарына баһа бирә (телмәр, логика, уҡыусылар менән мөнәсәбәт булдырыу һ.б.).
- йомғаҡлауҙа уҡытыусы дәрестең сифатын яҡшыртыу буйынса үҙ тәкдимдәрен әйтә һәм үҙ педагогик оҫталығын камиллаштырыу буйынса саралар билдәләй.

**Ә инде коллегалары алдында үҙ дәресенә баһа биргәндә түбәндәге алгоритмға нигеҙләнеп үҙанализ яһай.**

Дәрескә үҙанализ схемаһы.

Класс_____ катнашыусылар һаны____ исемлек буйынса____

Дәрестең темаһы______________________________________

1. Дәрестең төрө һәм структураһы.

2. Был дәрестең тема эсендәге роле нисек? Был дәрес үткәне менән нисек бәйләнгән?

3. Класка кыçкаса педагогик-психологик характеристика (укыусылар һаны, катнашыусылар һаны, "көслө" һәм "көсһөҙ" укыусылар һаны, укыусыларҙың дәрестә әүҙемлеге, дәрескә әҙерлектәре, ойошканлыктары).

4. Дәрескә комплекслы максат ниндәй (белем биреүсе, үçтереүсе, тәрбиәүи)? Был максаттарҙың тормошка ашырылыуына баһа бирергә, дәрестең һөҙөмтәлелеген нигеҙләргә.

5. Дәрестең максатына ярашлы йөкмәткеһене, белем биреү (укытыу) формаларын һәм методтарын һайлап алыуҙы иçбат итергә. Дәрестә белем биреүҙең һөҙөмтәләренә нигеҙләнеп, дәрестең төп этабын билдәләргә һәм уға тулы анализ яһарға.

6. Дәрес этаптарына материалдар һәм эштәр рациональ бүленгәйнеме? Этаптар араһындағы бәйләнештәр логик һакланамы? Дәрестең башка

этаптарының төп этапҡа нисек эшләгәндәрен күрһәтергә.

7. Дәрес маҡсатына ярашлы дидактик материалдарҙың, техник уҡытыу сараларының, күргәҙмә әсбаптарҙың, таратма материалдарҙың һайлап алыныуын нигеҙләргә.

8. Уҡыусыларҙың белемдәрҙе үҙләштереүен тикшереү нисек ойошторолдо? Дәрестең ҡайһы этабында? Ниндәй формаларҙа һәм ниндәй методтар ярҙамында тормошҡа ашырылды? Уҡыусыларҙың белемен көйләү һәм төҙәтеү нисек ойошторолдо?

9. Дәрестәге психологик атмосфера.

10. Дәрес һөҙөмтәләрен нисек баһалайһығыҙ? Бөтә алға ҡуйылған бурыстар тормошҡа ашырылдымы? Әгәр үтәлмәһә, ни өсөн?

11. Үҙ эшмәкәрлегенең перспективаларын билдәләргә.

ФГОС талаптарына ярашлы ойошторолған

дәрескә анализ яһағанда иҫәпкә алына:

1. Дәрестең төп маҡсаты: белем биреүсе, үҫтереүсе, тәрбиәүи. Уҡытыусы тарафынан ҡуйылған маҡсаттарҙың ғәмәлгә ашырылыуы күҙәтеләме?

2. Дәресте ойоштороу: дәрес төрө, структураһы, этаптары һәм уларҙың логик эҙмә-эҙлеклеге һәм вакыт буйынса дөрөҫ бүленеше, дәрестең максатына һәм йөкмәткеһенә ярашлы дөрөҫ төҙөлөшө.

3. Дәрестең ФГОС талаптарына тап килеүе.

3.1. Дәрестең яңы белемдәр алыу (үҙләштереү) һөҙөмтәләренә йүнәлтелгән булыуы.

3.2. Дәрес барышындағы эшмәкәрлектең укыусыларҙың универсаль укыу эшмәкәрлеген формалаштырыу максатында ойоштороолоуы.

3.3. Белем биреү процесында заманса технологияларҙың кулланылыуы (проект, тикшеренеү, ИКТ һ.б.).

4. Дәрестең йөкмәткеһе.

4.1. Материалдың укыусыларҙың йәш үҙенсәлектәренә карап һайлап алыныуы. Уның балаларҙың психо-физиологик мөмкинлектәренә тап килеүе.

4.2. Дәрес йөкмәткеһенең программа талаптарына тап килеүе.

4.3. Теорияның практика менән бәйләнеше, укыусыларҙың тормош тәжрибәһен уларҙың танып белеү әүҙемлеген һәм үҙаллылығын үҫтереү максатында

файҙаланыу.

4.4. Өйрәнелеүсе материалдың үтелгәндәр менән бәйләнеше, предмет-ара бәйләнештәр.

5. Дәресте үткәреү методикаһы.

5.1. Уҡыусыларҙың белемдәрен һәм эшмәкәрлек алымдарын актуалләштереү. Уҡытыусы тарафынан проблемалы һорауҙар ҡуйылыуы, проблемалы ситуациялар тыуҙырылыуы.

5.2. Уҡытыусы ниндәй методтар ҡулланды? Репродуктив һәм эҙләнеү (тикшеренеү) эшмәкәрлек төрҙәре күпме өлөш тәшкил итте? Сағыштырып ҡарағыҙ (“уҡы”, “һөйлә“,“ҡабатла“,“иҫеңә төшөр “ – репродуктив характер, “иҫбат ит“,“аңлат“,“баһала“,“сағыштыр“,“хатаһын тап“ – эҙләнеү характерында.

5.3. Уҡытыусы эшмәкәрлеге менән уҡыусы эшмәкәрлегенең нисбәте. Үҙ аллы эштәрҙең күләме һәм характеры.

5.4. Уҡытыусы түбәндә һанап үтелгән ниндәй танып белеү методтарын ҡуллана (күҙәтеү, тәжрибә, мәғлүмәт эҙләү, сағыштырыу, уҡыу)?

5.5. Аралашыуҙа диалог формалары

кулланыламы?

5.6. Укыусыларҙың белемен файҙаланғанда стандарт булмаған ситуациялар тыуҙырылыуы.

5.7. Кире бәйләнеш булдырыуы.

5.8. Фронталь, төркөмләп, парлап һәм индивидуаль эшләү эш төрҙәрен аралаштырыу.

5.9. Дифференциаль укытыуҙы тормошҡа ашырыу. Төрлө кимәл укыусыларға айырым эш биремдәре булыуы.

5.10. Белем биреү саралары. Темаға һәм дәрес этабына ярашлы уларҙың маҡсатлы файҙаланыуы.

5.11. Күргәҙмә материалдарҙы файҙаланыу: күргәҙмә материал сифатында, эмоциональ мөхит тыуҙырыу өсөн, укытыу (белем биреү, белем алыу) белем биреү мәсьәләләрен хәл итеү өсөн. (етерлек, артыҡ күп, урынлы, етерлек кимәлдә түгел).

6. Дәрестең психологик нигеҙҙәре.

6.1. Укытыусы тарафынан укыусыларҙың йәш үҙенсәлектәре, мөмкинлектәре, ҡыҙыҡһыныуҙары иҫәпкә алыныуы.

6.2. Белем биреүҙең үҫтереүсе функцияһының тормошҡа ашырылыуы. Ҡабул итеү, иғтибар, күҙ алдына килтереү, фекерләү, хәтер, телмәр сифаттарын үҫтереү.

6.3. Дәрестең ритмы: төрлө дәрәжә ауырлыктағы материалдың алмашлап килеүе, уҡыу эшмәкәрлегенең төрлөлөгө.

6.4. Психологик паузаларҙың, көсөргәнеште сисеү алымдарының булыуы. Дәрестең эмоциональ атмосфераһы.

7. Өйгә эш: күләме, аңлайышлы инструктаж, дифференциация, һайлап алыу мөмкинлеге.

8. Уҡытыусының ижади ҡарашы, педагогик яңылыҡ индереүе.

Шулай уҡ бында дәрескә комплекслы анализ яһау алгоритмын биреп үтеүҙе урынлы булыр тип таптыҡ.

**Дәресте комплекслы анализлау**

Комплекслы анализ йөкмәткеһе төрлө булырға мөмкин, традицион рәүештә түбәндәге йүнәлештәр айырып ҡарала.

1. Уҡытыусы хәл иткән бурыстарҙы анализлау.

1.1. Йөкмәткелә һәм уҡытыусының эш методикаһында белем биреү принциптары нисек сағылыш таба һәм иҫәпкә алына;

1.2. Дәрестең дидактик һәм тәрбиәүи бурыстары ни

дәрәжәлә ирешелде;

1.3. Дәрестең төрлө этаптарында уҡыусыларҙың танып белеү эшмәкәрлеге ни кимәлдә әүҙемләштерелде;

1.4. Уҡыусыларҙың белем алыуға яуаплы ҡараштарын тыуҙырыуға нимә булышлыҡ итте;

1.5. Уҡыусыларҙың белемдәре ни кимәлдә объектив баһаланды;

1.6. Теория менән практика бәйләнеше нисек ғәмәлгә ашырылды;

1.7. Йөкмәтке менән уҡытыу методтары уңышлы үрелеп барҙымы;

1.8. Дәрестә техник уҡытыу саралары ҡулланылдымы;

1.9. Уҡытыусы тарафынан уҡыусыларҙың йәш һәм индивидуаль үҙенсәлектәрен, мөмкинлектәрен һәм хәләттәрен иҫәпкә алыу өсөн нимәләр эшләнде.

2. Дәрестең тәрбиәүи әһәмиәтен анализлау.

2.1. Дәрестә алынған белемдәр ни кимәлдә тормошто аңларға булышлыҡ итте;

2.2. Дәрестә уҡыусыларҙы тәрбиәләүгә (эстетик, аң, хеҙмәт, физик) нимә булышлыҡ итте;

2.3. Уҡыусылар, уҡыусылар һәм уҡытыусы араһында

ниндәй мөнәсәбәттәр урынлашты.

3. Укытыусы эшмәкәрлегенең мөмөкинлектәре һәм үҙенсәлектәре. Укытыусы шәхесенең һәм эшмәкәрлегенең һәләттәре һәм мөмкинлектәре нисек асылды.

3.1. Педагогик этика;

3.2. Тышкы киәфәт;

3.3. Класты күрә белеүе, укыусылар эшмәкәрлеген активлаштырыу һәм эшмәкәрлеккә мотивация тыуҙырыуы;

3.4. Укыусылар эшмәкәрлегендә типик хаталарҙы билдәләү һәм уларҙы төҙәтеү;

3.5. Укыусыларҙың һәм үҙенең эш һөҙөмтәләрен баһалауы;

3.6. Дәрес барышын тиҙ арала көйләп ебәрә белеүе.

4. Дәрестә укыусылар эшмәкәрлеген анализлау.

4.1. Укытыусылар тарафынан укыусыларҙың тәрбиә, белем кимәлен, алдағы дәрестәр һөҙөмтәләрен иҫәпкә алыныуы;

4.2. Укыусыларҙың дәрестә эшмәкәрлеге;

4.3. Укыусыларҙың эшсәнлеге (фекерләй белеүе, үҙ аллы эшләй белеү, иптәштәренә ярҙам итеү, кыҙыкһыныуҙары һүрелмәүе һ.б.);

4.4. Уҡыусыларҙың телмәр культураһы;

4.5. Уҡыусыларҙың теорияны пратикала ҡуллана белеүҙәре.

Үткәрелгән дәрескә анализ яһағанда икенсе төр критерийҙар системаһын да ҡулланырға мөмкин. Әммә һәр осраҡта ла анализ критерийҙары бөгөнгө дәрескә талаптар менән ауаздаш булырға, дәрестәрҙең юғары кимәлдә һөҙөмтәле итеп ойоштолоролоуына булышлыҡ итергә тейеш.